*Рауил БИКБАЕВ,*
*Башкортостандың халык шағиры*

# Бөтә донъя башҡорттары, берләшәйек!

Бөгөн был тарихи йыйында тантана иткән төп тойғо —шатлыҡ тойғоһо. Шатланырға сәбәптәр бар, ҡыуанырға хаҡыбыҙ бар. Яңы быуатҡа, яңы мең йыллыҡҡа Башҡортостан суверенлы дәүләт булып, ошо дәүләткә исем биргән башҡорт халҡының телен дәүләт теле тип раҫлап, бөйөк төҙөлөш майҙанына әйләнгән уңған һәм татыу ил булып, ышаныслы аҙымдар менән килеп инде. Шатлыҡтарыбыҙға бәрәбәр бурыс-маҡсаттарыбыҙ ҙа үтә яуаплы. Төп маҡсатыбыҙ — суверенлы дәүләтселегебеҙҙе һаҡлау һәм артабан нығытыу, аҫаба ерҙәребеҙҙе ҡурсалау, илгә ҡот-бәрәкәт, байлыҡмуллыҡ өҫтәү, телебеҙҙе, иманыбыҙҙы юғалтмау.

Әлбиттә, шатланырға ғына йыйылмағанбыҙ, ҡәҙерле туғандар. Көрәшеү ҡыуанысына борсолоуҙарыбыҙ ҙа ҡушылған, күпме һорауҙар тынғы бирмәй. Кем беҙ, бөгөнгө башҡорттар? Иртәгә кемдәр булырбыҙ?

Минең өсөн донъяла ике төрлө башҡорт бар. Берәүҙәре — халҡы өсөн янған, ерен-телен хәстәрләгән, милләтенә файҙа килтерергә тырышып йәшәгән башҡорттар. Икенселәре — ил һәм халыҡ яҙмышына битараф, милләтенә ҡул һелтәгән башҡорттар. Бына ошо ябай ғына билдәләмә, ошо икегә бүленеш халыҡтың бөгөнгөһөн һәм киләсәген асыҡ күҙ алдына баҫтыра. Берләшеү ҙә, тарҡалыу ҙа ошонан башлана. Битарафтар, ғәмһеҙҙәр кәмегән һайын берҙәмлек арта, рухыбыҙ нығына бара.

Был оло ҡоролтайға бөтә донъянан халҡын һөйгән, милләте өсөн көйгән башҡорттар йыйылған.

Милләтебеҙҙең бөгөнгө һәм киләсәк яҙмышын нығытыу, төрлө яҡлап матур үҫергә яңы юлдар асыу өсөн хәҙерге мөмкинлектәр уҙғандар менән сағыштырғанда, әлбиттә, күберәк. Дәүләт менән халыҡтың элеге һымаҡ берләшкән сағы, Башҡортостан Президенты менән Башҡортостан граждандарының, улай ғына ла түгел, республиканан ситтә йәшәгән милләттәштәребеҙҙең уйтеләктәренең бөгөнгөләй тап килгән сағы — өлөшөбөҙгә төшкән көмөшөбөҙ, аҫыл хазинабыҙ. Ил һәм халыҡ тормошонда бындай саҡтар гел генә булып тормай. Шуға һәр көндөң ҡәҙерен беләйек. Тарихи форсаттан файҙаланып, мөҡәддәс маҡсаттарыбыҙға ирешһәк, ҡыуаныстарыбыҙ сикһеҙ, бәхетебеҙ бөйөк буласаҡ. Мөмкинлектәрҙе заяға үткәрһәк, беҙҙең булдыҡһыҙлыҡ тарихи хатаға әйләнәсәк, милләттең бәхетһеҙлегенә килтерәсәк.

Суверенлы Башҡортостан Республикаһының конституцион төҙөлөшөндәге һуңғы йылдарҙағы иң ҙур ҡаҙаныштарҙың береһе — башҡорт теленең дәүләт теле статусын алыуы. Хаҡлы талаптарыбыҙ ниһайәт тормошҡа ашты. Ләкин был тарихи закондың беҙгә ни тиклем оло яуаплылыҡ йөкмәткәнен барыбыҙ ҙа аңлап еткерәбеҙме икән? Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, быны тоймағандар бик күп. Тел яҙмышын ҡайғыртыу ул уҡытыусылар эше, яҙыусылар эше, тел ғалимдары эше, дәүләт бурысы, Президент бурысы тип йәшәүселәр бик күп.

Туған телебеҙҙең дәүләт теле кимәленә күтәрелеүе милли үҙаңыбыҙҙы ла яңы юғарылыҡҡа күтәр-

һен ине. Шунһыҙ тарихи яңырыу булмаясаҡ. Башҡорт телен һәр башҡорт ғаиләһендә дәүләт теленә әйләндереү, һәр ғаиләгә башҡорт китабын, башҡорт матбуғатын еткереү — был яҙыусыларҙың ғына хыялы түгел. Был — тормош талабы, милләттең киләсәктә милләт булып йәшәүенең, этностың һаҡланыуының ҡәтғи һәм аяуһыҙ шарты.

Эйе, туған тел милләтте йәшәтеүсе төп көстәрҙең береһе. Ләкин бөгөн башҡортса һөйләшкән һәр башҡорт халҡыбыҙҙың ышаныслы таянысы булһа икән дә бит! Тормошта башҡасараҡ килеп сыға.

Башҡортса уйлаған, әммә башҡорт тураһында уйлап та ҡарамаған милләттәштәребеҙ аҙмы ни?! Башҡортса рәхәтләнеп һөйләгән, әммә башҡортто яҡлап, халҡы өсөн борсолоп бер генә һүҙ ҙә әйтмәгән, милләтебеҙ өсөн ҡыл да ҡыбырлатмаған ҡан ҡәрҙәштәребеҙ аҙмы ни? Башҡортса һөйләп, башҡорт хаҡында һөйләп, һүҙҙән ары китмәгән башҡорттарыбыҙ аҙмы ни? Бер-береһе менән башҡортса һөйләшеп тә, бер-береһен аңлай алмаған, уртаҡ фекер туплай алмаған башҡорттарыбыҙ аҙмы ни?

Башҡортса һөйләшә белмәгән милләттәштәребеҙгә лә ауыр һүҙҙәр әйтергә ашыҡмайыҡ. Уларҙың күпселеге ошондай аяныслы хәлгә ҡалғандарына һис кенә лә гәйепле түгел. Араларында башҡортса уйламаһа ла башҡорт хаҡында уйлап, халҡыбыҙ өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер ил азаматтары бар. Уларҙы хөрмәт итәйек, изге эштәре өсөн рәхмәттәр әйтәйек. Телебеҙҙән, моңобоҙҙан айырылғандар киләсәктә булмаһын өсөн, йәш быуындың туған телдән көс-илһам алып үҫеүе өсөн көрәшәйек.

Милләтебеҙ донъяның әллә күпме тарафтарына һибелгән. Ҡайһыларын яҙмыш алыҫтарға илтеп юлыҡтырған, ҡайһылары аҫаба ерҙәребеҙҙә йәшәһә лә, хакимдарҙың рәхимһеҙ ҡулы менән Башҡортостандан ботарлап алып ташланған. Милләтебеҙҙең яртыһы тиерлек республиканан ситтә йәшәй. Тимәк, тотош халҡыбыҙҙың үткер проблемаларын уларҙан тыш хәл итеп булмаясаҡ.

Башҡортостанда башҡорт булыуҙары ҙур яуаплылыҡ. Ә һин бына Башҡортостандан ситтә башҡорт булып ҡара! Был яҡты донъяларға башҡорт булып тыуғанбыҙ икән, ҡайҙа йәшәһәк тә, башҡорт булып ҡалайыҡ! Тамырҙарыбыҙға, шәжәрәләребеҙгә, бөгөнгөбөҙгә һәм киләсәгебеҙгә, рухыбыҙға тоғро булып ҡалайык!

Тарихи ваҡиғалар береһенә береһе үрелеп бара. Быйыл Рәсәйҙә халыҡ иҫәбен алыу үтәсәк. Халыҡ иҫәбен алыу һәр милләт өсөн һынау ул. Һәр беребеҙ ошондай һынауҙарҙа һынатмаһаҡ, гәләм алдында абруйыбыҙ тағы ла нығынасаҡ.

Халыҡ иҫәбен алыу ваҡытында бер бик борсоулы мәсьәлә тағы ла борсоулыраҡ булып күҙ алдына баҫасаҡ. Был — Башҡортостанға йәшәргә ситтән килеүселәр мәсьәләһе. Ситтән килеүселәр ике төрлө. Берәүҙәре — сараһыҙҙан Башҡортостанға килеп һыйыныусы бисаралар. Уларға хөкүмәтебеҙ ҡулдан килгәнсә ярҙам итә. Торлаҡка үҙебеҙҙә ҡытлыҡ булһа ла, ҡарауһыҙ ҡалмайҙар. Ләкин күсеп ҡайтыусы башҡорттарҙың һаны урыҫ йәки татар менән сағыштырғанда күпкә ҡайтыш. Ҡайтҡандарының атай-олатайҙары төйәгендә ышыҡ таба алмай, ят тупһала тилмергән һымаҡ, тилмереп йөрөгәндәре лә байтаҡ.

Күпме милләт кешеләре яҙмыштарының һәләкәтле йылдарында быуаттар һуҙымында Башҡортостанға килеп тамырланған. Ҡайһы бер халыҡтарҙың, мәҫәлән, мариҙарҙың, сыуаштарҙың, удмурттарҙың айырым йолалары, тел байлыҡтары үҙҙәренең республикаһындағыға ҡарағанда Башҡортостанда нығыраҡ һаҡланған. Халыҡтар дуҫлығы беҙҙә яңғырауыҡлы һүҙ түгел, йәшәйешебеҙҙең нигеҙе. Ләкин һуңғы йылдарҙа бер бик хәүефле күренеш ныҡ хафаға һала. Өфөлә лә, башҡа ҡалаларыбыҙҙа һәм райондарыбыҙҙа ла көньяҡ кешеләре күбәйҙе. Улар артҡандан-арта бара. Оло һәм кесе баҙарҙарҙа сауҙа итеү-

сеЛәр — шулар, төҙөлөштә — шулар, иң шәп фатирҙарҙы һатып алыусылар — шулар. Шулар ҡунаҡханаларға, ятаҡтарға тула. Күпме ерҙә шулар хужа. Күпме йәш кенә ҡыҙҙарыбыҙ шуларға ялсы булып бил бөгә, ҡол урынына хеҙмәт итә, шуларҙың күңелдәрен аса. Былар барыһы ла милләтебеҙҙең рухи һәм физик сәләмәтлеген ҡаҡшата, социаль, иҡтисади хоҡуҡтарын сикләй.

Беҙ республикала үҙебеҙ теләп һан буйынса аҙсылыҡта ҡалманыҡ. Әгәр Башҡортостанға ситтән аҡсалы халыҡ һаман да шулай ябырылһа, ил мөлкәтен ҡулына алһа, хәлебеҙ тағы ла ауырайасаҡ. Был ҡыйынлыҡтан сығыу юлдарын барыбыҙға ла күмәкләп эҙләргә һәм был эште һуҙмаҫҡа кәрәк. Юғиһә был яман процестың ҡулдан ысҡыныуы мөмкин.

Хәҙерге тормошта күп нәмәләр етмәй. Башҡортҡа иң ныҡ етмәгәне — берҙәмлек. Берҙәмлек араларҙың яҡынлығы менән генә билдәләнмәй. Бер түшәктә йоҡлағандар ҙа төрлө төштәр күрә. Бер арбала ултырып барғандар ҙа төрлөһө төрлө йыр йырларға мөмкин. Йыш ҡына янындағылар ҙа ят була, ә йөҙәр, меңәр саҡырымдар аша фекерҙәшеңде табып ҡыуанаһың. Иң мөһиме — күңелдәрҙең яҡынлығы, ынтылыштарҙың, маҡсаттарҙың уртаҡлығы.

Был ҡоролтайҙан ҡайтыр яҡтарыбыҙға берҙәмерәк булып юлланайыҡ, һәр беребеҙ үҙ төйәгебеҙгә көслөрәк булып ҡайтайыҡ. Был ҡоролтай беҙҙе уйсанырак итһен, уңғанырак итһен, хәстәрлерәк итһен, ҡанатлырак итһен!

Ил тупланды бөгөн оло
ҡоролтайға,
Был байрамда бер туғандай
гөрләшәйек.
Байраҡ булып ҡалҡһын бөйөк
маҡсатыбыҙ,
Бөтә донъя башҡорттары,
берләшәйек!

Байрам тыныр, тик тынмаһын уртаҡ
уйҙар,
Әйҙәп торһон алға хәләл көрәшебеҙ.
Ситкә ташла ваҡсыллыҡты,
көнсөллөктө,
Бөтә донъя башҡорттары,
берләшегеҙ!

Милләттәштәр! Инде иңгә терәшәйек,
Серләшәйек, уңғанлыҡта серәшәйек.
Ғәмһеҙ булһаҡ, тарих беҙҙе ғәфү
итмәҫ,
Ҡалҡһын тиһәк илдә бәхет ҡояшыбыҙ,
Бөтә донъя башҡорттары, берләшәйек!

Кәрәк түгел милләтем тип тамаҡ ярыу,
Кәрәк бары милләт өсөн юлдар ярыу,
Кәрәк бары көн-төн тимәй алға барыу,
Берләшегеҙ, бөтә донъя башҡорттары!

Еребеҙ тип беҙ янмаһаҡ, кем һуң
янып?
Бәләләрҙән беҙ ҡотҡармай, кем
ҡотҡарыр?
Көс-ҡеүәтте беҙ тапмаһак, кем һуң
табыр?
Берләшәйек, бөтә донъя
башҡорттары!

Беҙгә бер кем ситтән килеп ярҙам
ҡылмаҫ,
Үҙебеҙҙең иңебеҙҙә бар эшебеҙ.
Еңелмәйек ялҡаулыҡтан,
тарҡаулыҡтан,
Бөтә донъя башҡорттары, берләшегеҙ!

Илгә, йортҡа ҡот-бәрәкәт килһен
тиһәк,
Китһен хәсрәт, кипһен тиһәк күҙ
йәшебеҙ,
Таяныстың иң ныҡлыһы —
тоғролоҡта,
Бөтә донъя башҡорттары, берләшегеҙ!